Автор Айгиз Баймухаметов

ПОВЕСТЬ

# «ПТИЦЕЙ Я СТАНУ...»

## «ҠОШҠА ӘЙЛӘНЕРМЕН МИН...»



Перевод с башкирского Загиды Мусиной
Башҡортсанан Заһиҙә Мусина тәржемә итте

Айгиз Баймухаметов

# Птицей я стану. Повесть / Ҡошҡа әйләнермен мин…

«Союз Писателей России»

2025

**Баймухаметов А.**

Птицей я стану. Повесть / Ҡошҡа әйләнермен мин… /
А. Баймухаметов — «Союз Писателей России», 2025

IБашҡорт яҙыусыһы Айгиз Баймөхәмәтовтың Заһиҙә Мусина тәржемәһендәге повесы йәмғиәтебеҙҙең иң сетерекле проблемаһына — ғаилә емерелеүгә бағышланған. Повеста бөгөнгө заман ғаиләһе тураһында һүҙ бара. Ата-әсәһенең яңынан ярашыуын ихлас теләгән малай, атаһын эҙләп, алыҫ юлға сыға. Юлында уға төрлө кешеләр — изге күңеллеләре лә, яуыздары ла осрай, уларҙың һәр береһе тормошҡа һабаҡ бирә. Баланың сәйәхәте ата менән әсә кешене лә үҙгәртә. Уларҙың етешһеҙлектәрен, хаталарын асып һала, йөрәк яраларын һиҙҙертә. Уҡыусы был геройҙарҙа үҙен дә таный. Бала саҡтағы хәсрәттәрен, хистәрен яңынан йөрәге аша үткәрә. Был әҫәр балаларҙы ла, ололарҙы ла уйландыра һәм тормошта дөрөҫ юл һайларға ярҙам итә. Повесть башкирского писателя Айгиза Баймухаметова в переводе на русский язык Загиды Мусиной посвящена одной из самых острых проблем нашего общества — разрушению семьи, и ее главный герой — не отдельный человек, а современная семья. Рассказ ведется от лица отца, матери и их маленького сына. Искренне мечтая, чтобы родители помирились, мальчик отправляется в путешествие, которое становится сакральным: он ищет отца, встречается с добром и злом, воплощенными в людях, и видит сон, который становится вещим. Это путешествие сына меняет и его родителей, обнажая их недостатки, ошибки, боль, которые, безусловно, знакомы каждому. Читатель узнаёт в героях повести себя и получает возможность прожить и осмыслить заново и детские, и взрослые переживания, и сделать правильный выбор на жизненном пути.

© Баймухаметов А., 2025
© Союз Писателей России, 2025

# Содержание

Ҡошҡа әйләнермен мин… 7
Пролог 7
Мин – әсәй 8
Мин – атай 10
Мин – бала 11
Мин – әсәй 14
Мин – бала 16
Мин – атай 20
Мин – бала 21
Конец ознакомительного фрагмента. 23

# Айгиз Баймухаметов
# Птицей я стану…
# Повесть
# Ҡошҡа әйләнермен мин…

* * *

© Айгиз Баймухаметов, текст, 2025
© Загида Мусина, перевод, 2025
© Союз писателей России, 2025
© А. Головина, дизайн и вёрстка, 2025

# Ҡошҡа әйләнермен мин…

## Пролог

Осрашыуҙан һуң яныма оло йәштәге ҡатын килде. Йөҙө йонсоу күренә.

– Мин һеҙҙе күптән көттөм, улым, – тип башланы һүҙен. Беҙҙең йолаға ярашлы ҡуш ҡуллап иҫәнләштек. Әбейҙең ҡулдары ҡалтыранғанын шунда ғына һиҙеп ҡалдым. Күпме тырышып ҡараһам да, был инәйҙе хәтергә төшөрә алманым. Таныш түгелбеҙ, шикелле, ә ни эшләп мине шулай көттө икән? Етмәһә, күптән ти… Бик сәйер күренде.

– еҙҙең менән һөйләшәһе һүҙ бар ине, – тип дауам итте ул. – Әйҙәгеҙ ситкәрәк китеп һөйләшәйек. Бында кешенең ишетеүе бар…

Ышығыраҡ ергә үттек. Әбей һүҙен башлар алдынан, берәү ҙә тыңлап тормаймы икән тип, тирә-яғына ҡаранып алды.

– Клара әбей булам. Ғүмер буйы почтала эшләнем, – тип үҙе менән таныштырҙы. – Күптән пенсияламын инде. Йәшемде әйтеп тормайым. Йәшәрен йәшәнем, ашарын ашаным, тигәндәй.

Әбей йылмайырға тырышҡандай итте. Тик килеп сыҡманы. Мин иғтибар менән тыңлай бирҙем:

– еҙҙе көтөүемдең сәбәбе шунда: йомош тиергәме, тәҡдимме, үтенесме… Нисек әйтергә лә белмәйем. Бына ошо төргәктә документтар күсермәһе, хаттар, суд ҡағыҙҙары ята. Әгәр иғтибарлап уҡып сыҡһағыҙ, барыһын да аңларһығыҙ. – Әбей һәлмәк кенә төргәкте миңә һуҙҙы. Мин өнһөҙ ҡалдым. Әбейҙең күҙенә ҡарағас та, йөрәкте семтеп алғандай булды: ҡарашы шул тиклем һағышлы ине. Донъянан йонсоған, йәшәүҙең бар йәмен юғалтҡан кешенең күҙ ҡарашы ғына шулай булалыр.

– Бер нәмә лә һөйләп тормайым, балам. Иҫләһәм, ҡыйын булып китә. – Ҡарсыҡ бына-бына илап ебәрер төҫлө. – Һеҙгә тип йыйған ҡағыҙҙарҙы уҡып сыҡһағыҙ, аңларһығыҙ.

– Ярай, инәй. Мотлаҡ уҡып сығырмын. Аҙаҡ һеҙҙең менән нисек бәйләнешкә инә алам һуң? Яуапты ҡайһы адресҡа яҙырға?

– Рәхмәт, улым, яуап яҙмаһағыҙ ҙа була. Хәҙер бер нәмәне лә үҙгәртеп булмай. Ниәтем шул ғына: ошо хәлгә таянып, бәлки, берәй нәмә яҙырһығыҙ? Бүтәндәргә һабаҡ булһын. Ошо хатаны ҡабатламаһындар ине…

– Аңлашылды.

– Үҙегеҙ ҡарарһығыҙ. Тик исемемде үҙгәртерһегеҙ инде. Берәүгә лә һөйләгәнем юҡ ине. Ә эстә, бына йөрәктә, ауыр таш булып ята. Кем ғәйепле икәнен төбәп әйтә лә алмайым: минме, улыммы, киленемме… Ошо үкенес йөрәгемде тырнай, теге донъяла ла йәнем тынғы тапмаҫ инде, моғайын. – Хистәренә ирек бирә башлаған ерендә генә, әбей тыйылып ҡалды. – Ярай, бөгөнгө матур осрашыу кисәһен шулай йәмһеҙләмәйем әле. Берүк ғәфү итегеҙ. Ғәйепкә алмағыҙ ҡарт кешене…

Беҙ хушлаштыҡ. Өйгә ҡайтҡас та әбей тапшырған ҡағыҙҙар менән танышып сыҡтым. Суд ҡарарҙары, хаттар, төрлө документтар күсермәһе… Ябай ғына ғаиләнең кисергәндәре мине бик ныҡ тетрәтте. Ошо хаҡта уйланып йөрөй торғас, ике йыл да үтеп киткән. Әбейҙең әйткән һүҙҙәре бер ҙә хәтерҙән сыҡмай: «Бәлки, берәй нәмә яҙырһығыҙ. Бүтәндәргә һабаҡ булһын. Ошо хатаны ҡабатламаһындар ине…»

# Мин – әсәй

Тирә-яҡ әйләнә. Аҡты-ҡараны күрмәйем. Тыным быуыла, аяҡтарым тотмай. Ә мин йән көсөмә йүгерәм дә йүгерәм.

– Баламды күрмәнегеҙме? Күрмәнегеҙме баламды?..

Юлда осраған һәр кемгә ошо һорауҙы бирәм. Тик… шатландырырлыҡ яуап юҡ. Башыма ниндәй генә уйҙар килмәй. Ҡайҙа ғына булды икән? Имен-һау ғына булһа ярай ине. Бер бөртөккәйем. Йөрәккәйем. Ауыртынып ҡына тапҡан бәпкәм бит ул. Ҡайҙа булды икән? Әллә… Ҡәһәр һуҡҡыр бәндә! Шуның ғына эше. Сәсрәп киткере! Шул урлаған! Тәким үҙенекен иткән, бәдбәхет. Башыма ҡайғы ғына булды бит шул ир ишараты. Бапаҡ! Эйе, эйе! Һуҡыр күрәҙәсе лә кәрәкмәй – шуның ғына эше.

Полиция бүлегенә нисек барып еткәнемде лә һиҙмәй ҡалдым. Кабинетҡа атылып индем дә, погонлы кешене күргәс, сараһыҙҙан һығылып илап ебәрҙем:

– Баламды урланылар! – тинем, быуылып. Башҡаһын аңлатып торорға хәлем юҡ ине.

Телефондан һөйләшеп ултырған полиция хеҙмәткәре әллә ни әһәмиәт бирмәне, шикелле. Ул һөйләшеүен тамамлап, миңә боролдо ла, тыныс ҡына һүҙ ҡушты:

– Нимә булды?

– Баламды урланылар! Иртәнсәк уйнарға сыҡҡайны, күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды!

– Әле нисә көн үтте?

– Дүрт сәғәт элек. Туғыҙҙа уйнарға тип сығып киткәйне.

– мм. Ҡыҙыҡ ҡынаһығыҙ. – Полиция асыулы ҡарап ҡуйҙы. – Шуның өсөн килдегеҙме?

– Нисек инде – шуның өсөн! – Ирҙең һүҙҙәренән асыуым ҡабарҙы ла китте. – Аңлайһығыҙмы, минең баламды урланылар?! Балам бер ҡасан да дүрт сәғәткә юғалмай торғайны. Йорт тирәһен, уйнаған майҙансыҡты аҫтын-өҫтөнә әйләндереп эҙләп сыҡтым. Юҡ! Ер упҡанмы ни?!

– Бәлки, ул берәй дуҫына ингәндер? Компьютер уйнап ултыралыр? Кис еткәс, ҡайтыр әле. Юҡҡа борсолаһығыҙ.

– еҙ ҡалай ҡыҙыҡ ҡына ул! Үҙегеҙҙең балағыҙ юғалһа, шулай көтөп кенә ултырыр инегеҙме?! Ласын ундай бала түгел. Минән рөхсәтһеҙ бер аҙым да ситкә баҫмай! Күрше-тирәнән һорашып сыҡтым: таныштары ла, гел бергә уйнаған дуҫтары ла күрмәнек ти. Ул бит көпә-көндөҙ юҡ булырға энә түгел!

– Нисә йәш уға?

– Ун!

– Бындай йәштәге баланың башында нимә булғанын белеп булмай. Тынысланығыҙ. Бына минең номер – кисен ҡайтмаһа, шылтыратырһығыҙ. Шунда ғаризағыҙҙы ҡабул итербеҙ, – ти полиция хеҙмәткәре, бер ни ҙә булмағандай тыныс ҡына. Ә минең эстә ут ҡайнай, үҙемә урын тапмайым. Закон кешеһе булмаһа, яғаһына барып йәбешер инем! Саҡ үҙемде тыйып торам.

– Нисек инде – кисен?! – тип ҡысҡырып ебәрҙем. – Бала бит ул! Мин һеҙгә тиктомалдан ғына урланылар тимәйем. Бында эш нык ҡатмарлы. Теге һәүерек уны тартып алам тип йыл буйына минең менән судлашты. Килеп сыҡмағас, тәким урланы!

– Ниндәй суд? Ошо урында анығыраҡ һөйләгеҙ әле…

– Теге әҙәм аҡтығы менән бер йыл элек айырылыштыҡ, – тинем. – Йәшәп булмай бит, йәшәп булмай! Ир тип әйтһәң, артыҡ булыр. Сибайҙа йәшәй ул. Шул хәсистең йөҙөн күрмәҫ өсөн генә Өфөгә күстек. Кешесә йәшәрмен тигәйнем, юҡ, һаман тынғы бирмәй. Әсәһе менән икәүләшеп талайҙар. Баламды тартып алабыҙ тип судлашып ҡаранылар. Барыбер, уларҙыҡы килеп сыҡманы. Үлһәм – үләм, барыбер уларға баламды бирмәйем. Кеше өсөн йөрәк ярып тапҡан артыҡ балам юҡ!

– Шунан, шунан… Тыңлайым.

– Шул ике аяҡлы ишәк тәким Өфөгә килеп тапты беҙҙе. Өйгә лә килеп аптыратты, мәктәпкә барып та баламдың ҡотон алған. «Барыбер баланды тартып алам» тип ҡурҡыта. Йөрөр-йөрөр ҙә, тынысланыр тип уйлаһам, юҡ инде, кешесә йәшәргә бирмәй. Теге ҡарға ла ҡоторта инде! Шуның һүҙенән китмәй бит, һәүерек! Тәким үҙенекен эшләне. Ҡалайтайым, икән, Аллаҡайым?! – Хәлемде аңлаған кешене күреп, тағы илап ебәрҙем.

– Ҡарғаһы кем ул? – ти, аптырап полиция.

– Кем булһын, шул ишәктең әсәһе. Үҙе лә эт нәмә. Яуызлығы менән үҙ ирен йәшләй теге донъяға оҙатҡан…

Мин бәйнә-бәйнә һөйләйем, ә полиция ауыҙын йыра. Әйтерһең, мин бында ҡайғы менән түгел, ә кеше көлдөрөргә килгәнмен.

– Нимәһе көлкө? – тим асыуланып. – Үҙегеҙҙе минең урынға ҡуйып ҡарағыҙ!

– Үҙегеҙҙең ҡайҙа икәнегеҙҙе онотмағыҙ. Мин дәүләт кешеһе. Үсекләшмәй генә, һәр һүҙҙе үлсәп әйтегеҙ. Бында бөтәһе лә яҙылып бара. Закон барлығын да онотмайыҡ, – ти ҡәтғи генә. Шунан уҫал итеп күҙемә ҡараны: – Нимә өсөн айырылыштығыҙ һуң?

– Әйттем бит инде баяғы: йүнле ир түгел! Әсәһе һүҙенән сыға белмәй. Эштән ҡайта ла диванда һуҙылып тик ята. Әсәһе көнө буйына мейемде ашай. Аш бешерһәм, оҡшатмай. Йә тоҙо әҙ, йә ҡуйы булған. Кер йыуһам, тағы бәйләнә. Күршеләргә сығып, мине һөйләй. Бөтөн нәҫелемде тикшерә, гелән етешһеҙлегемде эҙләй. Варисҡа айырым сығайыҡ, тип әллә күпме тылҡыным, ҡолағына ла элмәй. Белмәйем, үлгәнсе әсәһенең итәгенә йәбешеп йөрөргә уйлай микән?! Мин бала хаҡына түҙҙем, барыһына ла күҙ йомдом. Ә теге ҡарға… то есть ҡәйнә, малайын ҡотортоп, мине туҡматты! Ана, мин сығып киткәнгә бер йыл. Йүнле әҙәм булһа, күптән башҡа ҡатын алыр ине. Ә уға, ғазраил әсәһе менән йәшәгән кешегә, этем дә ҡарамаясаҡ!..

– Инде аңлашылды. Ғариза яҙығыҙ! – Полиция алдыма ҡағыҙ һуҙҙы. – Тағы малайҙың фотоһы кәрәк буласаҡ.

# Мин – атай

Хоккейҙың иң ҡыҙыу урынын ҡарап ятҡанда, ишек ҡыңғырауы шылтыраны. Ярай, берикене баҫыр ҙа, китер тип ята бирҙем. Көткән кешем юҡ. Ә ҡыңғырау йәнде көйҙөрөп һаман шылтырай бирҙе. У-ухх! Күп булһа, малай-шалай шаяралыр! Асыу килеп, ишеккә йүнәлдем. Ҡапыл асып ебәрһәм, полиция хеҙмәткәре тора.

– аумыһығыҙ. Шаһиев Варис һеҙ булаһығыҙмы?

– Мм-ин, – тинем, ҡапылда ҡаушап. – Нимә булған?

– Ласын һеҙҙең улығыҙмы?

– Эйе.

– Улайһа, һеҙҙең менән һөйләшәһе һүҙ бар. Әйҙәгеҙ эскә үтәйек.

– Әйҙәгеҙ.

Полицейский залға үтте. Үҙе нимәлер эҙләгәндәй алан-йолан ҡаранды. Әсәйем был ваҡытта баҙарға киткәйне. Ул өйҙә булһа, һөйләшеү башҡасараҡ булыр ине. Бәлки, суд эше буйынса килгәндәрҙер?! Малайҙың исемен дә юҡҡа һорамайҙыр тигән уй үтте баштан.

– Улығыҙ әле ҡайҙа? – ти, аптырамай ҙа.

– Нисек инде – ҡайҙа! Әсәһендә!

– Иптәш, әйҙәгеҙ башығыҙҙы иҫәргә һалмағыҙ. Беҙ бөтәһен дә беләбеҙ. Бала урлау өсөн – закон ҡаты! Төрмәлә урын етерлек!

– Ни-нисек инде, урланым? – Башыма эҫе булып китте. – Әсәһе менән йәшәй бит. Беҙҙе аралаштырмай ҙа.

– Алдан иҫкәртеп ҡуям, иптәш Шаһиев, ялған хәбәр өсөн дә айырым статья бар!

– Мин һеҙҙе бер ҙә аңламайым. Нимә булды һуң?

– Нисек инде – нимә булды! Улығыҙ юғалған. Элекке ҡатынығыҙ ғариза яҙҙы, бөтә шик һеҙгә төшә!

– Минең балам юғалғанмы?! – Көтөлмәгән хәбәрҙән йөрәгем атылып сығырҙай булды. – Ух, был шайтандан тыуған бисә! Тағы ниндәй ғәйеп тағырға уйлай икән, йылан?! Был ысын хәбәрме? Әгәр балаға берәй нәмә булһа, үҙем уның муйынын борам!

– Бормай торօғоҙ әле, – тине ҡәтғи полицейский. – Тимәк, һеҙ, ысынлап, теймәнегеҙме балаға?

– Ҡайҙан тейәйем! – Асыуым ҡабарҙы ла китте. Ҡулдар ҡалтырай. Үҙемдең нимә эшләгәнемде белмәнем. Ярһып, тәмәке тоҡандырҙым. – Тәким башына еткән, аждаһа! Бында рәхәтлеккә сыҙамай, ҡысынып Өфөгә сығып китте бит! Айырылышыу өсөн мең сәбәп тапты! Миңә үс итеп кенә эшләне бит ул! Шул баланы күрәм тип күпме Өфөгә барҙым. Мәктәптә, Ласын минең менән бер күрешкәне өсөн, шул йылан уҡытыусыларҙың йәнен ала яҙған! Хәҙер мәктәптәге һаҡсы мине ишеккә яҡын да ебәрмәй. Алдан судҡа ла биреп ҡарағайным. Судья былай аҡыллы ғына кеше, хәлде аңлай. «Бәлки, бала хаҡына ҡабаттан йәшәп ҡарарһығыҙ», – ти. Теге бисә судты тыңлаймы ни?! Уның үҙ туҡһаны туҡһан!.. Мине ниндәй генә этлектәрҙә, ниндәй генә әшәкелектәрҙә ғәйепләп бөтмәне!.. Ә бала «атай» тип өҙөлөп тора! Тәс миңә оҡшаған!

– Етте! – тип бүлдерҙе полиция. – Былай булғас, эштәр хөрт. Эҙләп ҡарайбыҙ инде. Ә һеҙҙән аңлатма алыр кәрәк…

Ҡатыным менән хәлдәр нисегерәк булғанын, баламды ҡасан һуңғы тапҡыр күргәнемде бәйнә-бәйнә яҙып алды ла, имза ҡуйҙыртып, һаубуллашып сығып китте.

# Мин – бала

Их-х, ул көндө-ө-ө! Барыһы ла һәйбәт башланғайны бит! Шатлығымдың сиге булмаҫ төҫлө ине. Ул бәхетле мәлде иҫләһәм, күңелгә рәхәт булып китә. Хәл былайыраҡ булды…

Дәрестә ултырһам, кемдер ишек шаҡыны. Завуч апай икән.

– Шаһиев Ласын бындамы? – тип һораны ул.

– Эйе, бына ултыра, – тип минең яҡҡа ымланы уҡытыусым.

– еҙгә атайығыҙ килгән! – ти завуч, йылмайып.

– Ата-йы-ым? Минекеме?! – Ишеткәнемә ышанмай, урынымдан ҡалҡынып ҡуйҙым.

– инеке, – тине. Шунан уҡытыусыма өндәште. – Биш минутҡа ғына сыҡһа, мөмкинме?

– Ярай, ярай…

– Киттек минең арттан, – тигәс, башым күккә тейгәндәй булды. Ауыҙ йырылды. Атайымды күптән күргән юҡ. Яман ныҡ һағындым. Уның менән күрешәм икән тип төштәремдә күреп бөттөм. Был хәбәрҙе мин күптән көттөм! Завуч шаяртмаһа ғына ярар ине.

Аҫҡа төшһәм, ауыҙы йырылып, ҡоласын йәйеп атайым тора. Ҡулында ҙур пакет.

– Ата-а-ай! – тип йүгереп, ҡосаҡлап алдым. Уны ныҡ итеп ҡыҫтым, тыным быуылды, башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алманым. Атайымдың ҡосағында шундай йылы, рәхәт икән! Үҙемде ошо мәлдә донъялағы иң бәхетле кеше итеп тойҙом. Шатлығымдан күҙҙән йәштәр аға ла аға…

– Йә, етәр инде, улым, илама! Һин бит ыласындар затынан! – ти, башымдан һыйпап атай. – Инде барыһы ла һәйбәт буласаҡ.

– Мин һине ныҡ итеп көттөм, атайым…

– Мин дә һине һағындым, улыҡайым. Әйҙә ултырып һөйләшеп алайыҡ…

Атайҙан ҡарашты алырға ла ҡурҡам. Һаман ышанып бөтә алмайым. Был төш түгел микән? Бына хәҙер күҙемде асырмын да бөтә шатлыҡ селпәрәмә килер төҫлө.

– Хәтәр ҙурайып киткәнһең! – ти атай, арҡамдан һөйөп. – Йә, һөйләп ташла, уҡыуҙар нисек?..

Мин гел «биш» кә уҡыуым тураһында, йүгереү буйынса ярышта беренсе урын алыуым хаҡында теҙеп алып киттем. «Шәп», «маладис», «уңғанһың», «аҡыллыһың да инде» тип һәр әйткәнемә ул баш ҡаға бирҙе. Атайҙың һәр һүҙе миңә ҡанат ҡуйҙы, ошо мәлдә үҙемде бер башҡа үҫкәндәй тойҙом…

– Мин ебәргән кейемдәр һиңә яранымы? – тип кинәт һорап ҡуйҙы ул.

– Ниндәй кейем?! Миңә бер нәмә лә бирмәнеңсе.

– Нисек инде бирмәнем?! Яңыраҡ ҡына таныштар аша спорт костюмы ебәрҙем бит. Иң матурын һайлап алғайным.

– Юҡсы, миңә бер ниндәй ҙә кейем алып килмәнеләр.

– Аңлашылды-ы-ы. – Әле генә балҡып торған атайымдың йөҙө үҙгәрҙе. – Үс итә, тимәк!

Шунан ул пакетынан бер ҡумта сығарҙы ла миңә һуҙҙы:

– Бына һиңә нимә алып килдем! Тыуған көнөң менән, бөркөтөм!

Ялтлап торған телефонды күргәс, иҫем китте. Бындай нәмә әле класыбыҙҙа берәүҙә лә юҡ. Хәҙер мәктәптә бөтәһенең дә күҙе дүрт була инде.

– Бына быныһы менән класташтарыңды һыйларһың! – тип бер пакет кәнфит, тағы әллә ниндәй тәмлекәстәр бирҙе. Ҡыуанып атайымды тағы ҡосаҡланым.

Шул саҡ теге завуч апай эргәбеҙгә килеп баҫты:

– Ҡалай атайыңа оҡшағанһың! – ти ул. – Ласын – беҙҙең мәктәптең ғорурлығы. Яҡшы уҡый, спортты ярата… Исемен белеп ҡушҡанһығыҙ! Уның күҙҙәренән нур бөркөп тора, йөҙөнән йылмайыу китмәй…

– Рәхмәт, рәхмәт! – тип ҡәнәғәтлек менән йылмая атай.

– Тик ваҡыт сикле. Уҡытыусыһынан һорап алып сыҡҡайным. Дәрескә барыр кәрәк…

– Ярай, – ти уңайһыҙланып атайым. – Өфөгә командировка менән килгәйнек. Юл ыңғайы ғына инеп сығырға булдым…

Беҙ оҙаҡ ҡына айырылыша алмай торҙоҡ. Их, гелән генә атай менән бергә булһаң ине!..

– Атай, әйҙә беҙгә йәшәргә кил. Һинһеҙ ҡыйын, – тинем кинәт, ҡурҡыуымды еңеп. Ялбарыуымдан уның йөҙө үҙгәреп китте. Бер аҙ шым торҙо ла башымдан һыйпап алды:

– Саҡ ҡына көт, йәме. Барыһы ла һәйбәт буласаҡ.

– ин тағы киләһеңме, атай?

– Киләм, киләм! Һин бит минең бер бөртөгөм.

– Мине онотма, атай. Мин һине ныҡ итеп көтәсәкмен. Миңә тәмлекәстәр ҙә, телефон да кәрәкмәй. Үҙең генә эргәмдә бул, яраймы?.. – Күптән эстән генә уйлап йөрөгәндәремде, әллә ҡайҙан батырсылыҡ итеп, теҙҙем дә киттем. – Бергә булырбыҙ тип һүҙ бирәһеңме, атай?

– үҙ бирәм!..

Ул көндө минән дә бәхетлерәк кеше булмағандыр! Класташтарымды атайымдың күстәнәсе менән һыйланым. Ә телефонды бөтәһе лә тотоп-тотоп ҡараны. «Ҡалай атайың шәп икән!» – тип маҡтап ҡуялар. Ә мин унан да нығыраҡ ҡыуандым. Атай һүҙ бирҙе! Бергә булабыҙ тип! Көн шулай төштәге кеүек тиҙ генә үтте лә китте.

Әсәйҙе һуңғы ваҡытта танырлыҡ түгел. Әллә ниндәйгә әйләнде ул. Гелән кемделер әрләй, юҡ-барға ҡыҙып китә. Атайым менән мәктәптә күрешкәнде белгәс, бөтөнләй туҙынды ла китте. Телефонды шатырҙатып тапаны ла ҡуйҙы! Был бит атайымдың тыуған көнөмә бүләге! Әле яңыраҡ ҡына булған бәхетле мәлем шулай күҙ менән ҡаш араһында юҡҡа сыҡты. Етмәһә, әйберҙәрҙе бәреп-бәреп енләнде. Үҙе илай, үҙе ҡысҡыра:

– атлыҡйән! Бер тәтәйенә алдандыңмы?! Һине бәхетле итәм тип кенә, юҡ аҡсаны бар итеп, кеше фатирына инеп, кеше көнлө булып йөрөйөм! Ә һин!..

Атайҙан күсеп киткәс, әсәйем бер ҙә әрләшмәҫ тип уйлағайным. Талашырға бында атай ҙа юҡ, өләсәй ҙә юҡ. Нимәгә шулай енләнә икән: аңламаçһың. Күңелгә шул тиклем ауыр. Үҙемде ҡайҙа итергә лә белмәйем. Төнө буйына уйланып ятҡандан һуң, ҡасырға булдым. Атайыма барам! Әсәйем юҡҡа әрләй уны, атайым яҡшы кеше ул. Миңә ҡул күтәргәне юҡ, һуғышмай. Ана бер класташымдың атаһы эсеп ала ла, төнө буйына йоҡлатмай икән. Юҡ, инде түҙер хәлем ҡалманы. Сибайға йәйәү булһа ла барып етәсәкмен…

И-их, ниңә генә мин ҡош түгелмен икән?! Атайыма осоп ҡына барып етер инем. Ҡоштар бәхетле, улар күктә, улар ҡанатлы… Бөтә күк йөҙө улар иркендә.

* * *

Төнө буйына эстән генә план ҡорҙом. Былай Өфөнө яҡшы беләм. Миңә тәүҙә аэропорттың боролошона барып етер кәрәк. Шунда ҡул күтәреп торһам, моғайын, берәйһе ултыртасаҡ.

Шулай килеп сыҡты ла. Аэропорт боролошонда оҙаҡ та торманым, бер «Лада» машинаһы килеп туҡтаны. Руль артында ултырған ағай яңғыҙы ғына ине. Мине алыр өсөн туҡтаған икән тиһәм, ул кафеға инергә итә. Ишеген бикләне лә ашарға инеп китте. Тышта уны оҙаҡ көтөп торҙом. Ә ул һаман сыҡмай ҙа сыҡмай.

Оҙаҡ көткәндән һуң теге ағай күренде. Унан ғына ярҙам буласағын тойоп, ҡаршыһына барҙым:

– Ағай, һеҙ Сибайға бармайһығыҙмы?

– Сибай?! Юҡ, мин унда нимә эшләйем… Белоретҡа китеп барам. – тине. Мин юлды яҡшы беләм: Белорет ҡалаһы Сибайға юл ыңғайы бит. Әгәр унда барып етһәм, атайға күп ҡалмай. Шуға ла ныҡыша бирҙем:

– Әтеү, Белоретҡа булһа ла алығыҙ инде.

– Әйҙә һуң…

Юлда шофер ағай менән һөйләшеп киттек. Ул минең яңғыҙ китеп барыуыма ғәжәпләнде:

– ин Сибайға тинең инде… унда нимәшләйһең?

– Унда атайым йәшәй. Уға китеп барам.

– Ә әсәйең ҡайҙа?

– Өфөлә.

– мм… Нисек йөрәге етеп, алыҫ юлға бер үҙеңде сығарып ебәрҙе?

– Рөхсәт итте! Мин юлды беләм бит ул. Беренсегә йөрөмәйем, – тип алданым.

Ағай музыка ҡуйҙы. Арыу ғына араны һөйләшмәй, йыр тыңлап барҙыҡ. Шунан шофер тағы төпсөнөргә тотондо:

– Мин уны-быны уйламай һине ултыртып алдым да… Хәҙер бына аптырайым әле. Белоретта һине ҡалдырһам, артабан нисек барырға уйлайһың?

– Автобусҡа ултырам да ары китәм!

Шофер шикләнеп ҡарап ҡуйҙы:

– Бик мутҡа оҡшағанһың! Ҡайҙа әсәйеңә шылтыратайыҡ әле. Номерын әйт әле миңә.

– Ә мин телефонымды юғалттым…

Ағай машинаны кинәт туҡтатты ла асыулы итеп миңә ҡараны:

– Ай Аллам! Бәлә генә булдың бит. Бала кешене нишләп мин ярты юлда ҡалдырып китәйем?! Башым ике түгел! Һинең менән берәй хәл булһа, кем ғәйепле – мин!

– Бер нәмә лә булмаясаҡ, ағай. Белоретта ҡалдырһағыҙ, еткән.

– Юҡ инде… Хәҙер берәй нәмә уйлармын!

Йоҡлай-йоҡлай бара торғас, Белоретҡа килеп еттек. Ул бейек тауҙар, һомғол ҡарағайҙар араһында урынлашҡан ҡала. Ағай автовокзал эргәһендә туҡтаны ла, «хәҙер киләм» тип тышҡа сыҡты. Мин ҡасмаһын өсөндөр, ишеген тыштан бикләне. Нимә эшләргә уйлай икән тип иғтибарлап күҙәтә башланым. Эргәһенән үтеп барған бер кешене туҡтатып, ағай ниҙер һорай башланы. Тегенеһе ҡулын болғай-болғай ниҙер аңлата. Ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, тәҙрәне саҡ ҡына асып, тыңларға булдым.

– Эйе, эйе! Автовокзалда полиция бүлеге әле асыҡ! – тип ят кешенең яуаплауын бик асыҡ итеп ишеттем. Был һүҙҙәрҙән терт итеп ҡалдым. Тимәк, шофер мине полицияға тапшырырға булған. Тоҙаҡҡа килеп эләккән йәнлек итеп тойҙом үҙемде. Нимә эшләргә?!

Шофер теге кеше менән ҡул бирешеп хушлашты ла автовокзал эсенә ҡарай атланы. Инде шул тиклем араны үтеп, бер ҙә тотолғо килмәй! Ағай күҙҙән юғалғанын көттөм дә, йән көсөмә ишекте типкеләй башланым, тик ул асылманы. Харап булам икән хәҙер! Бер минутты ла юғалтырға ярамай. Тәҙрәнән булһа ла сығасаҡмын. Ҡалтырана-ҡалтырана тотҡаны өйрөлткәйнем, тәҙрә тулыһынса асылды. Башымды тыҡтым да ҡулым менән йән көсөмә үҙемде алға этәнем! Мин – иректә!..

# Мин – әсәй

Бер ҙә һөйләшмәҫмен тип үҙемә ант итһәм дә, шул бапаҡҡа шылтыратмай булдыра алманым. «Бер нәмә лә белмәйем, юкты һөйләмә!» – тип трубканы ташлаған була мәхлүк. Яра-ай, күрһәтермен әле мин һиңә! Сәсрәгер нәмә! Асыуым килгәндә, бөтә уйлағанымды СМС аша ебәрҙем. Миңә генә ҡайғырырға тимәгән! Белһендәр Варистың кем икәнен! Бөтә туғандарына, таныштарына яҙып сыҡтым. Әсәһенә лә вис әйттем! Дөрөҫ эшләгәнмен бит?! Әтеү, улар ғына һылыу ҙа, улар ғына матур. Ә мин яман, имеш. Былай ғына баланы урлап, тыныс йәшәйем тиһәләр, күпкә яңылышалар. Әле минең кем икәнемде белмәйҙәр!..

Баламды ғына кире ҡайтарайым әле. Имандарын уҡытасаҡмын мин уларҙың! Шуларҙан үсемде алмаһам, исемем Таңһылыу булмаһын!

Тормошомдағы иң ҙур хатам шул ир ишараты булды! Иҫәр… Артымдан бит егеттәр көтөүе менән йөрөнө. Байҙары ла булды, ҙур түрәнең малайы ла артымдан илап йүгереп йөрөнө! Шуның береһенә сыҡһам, бөгөн май эсендәге бөйөр кеүек йәшәр инем. Ә мин тот та, шуның татлы һүҙенә алданып, ус аяһындай Сибайға сыҡ та кит. Ҡала тиһәң, хәтерең ҡалыр. Ҡайҙан ғына осраны ул юлыма, ҡайҙан ғына!

Юҡ, мин үҙем дә ҡала ҡыҙы түгел. Күп балалы ғаиләлә үҫтем. Ата-әсәйем дә – ябай крәҫтиәндәр. Әле Өфөлә лә туйып һикергәндән йөрмәйем бит. Бында эш бар, кеше фатирында йәшәһәк тә, үҙебеҙгә ашарға ҡала. Бәхетем асылмаҫмы тип Өфөгә ҡасып ҡараным. Юҡ инде… һаман шуның этлеген күрәм.

Анау көндә һуң, таныштар аша Ласынға кейемдәр биреп ебәргән бит әле! Мин шуның сепрәк-сапрағына мохтажмы? Тотоп та ҡараманым, сығарып сүплеккә бырағтырҙым. Кәрәкмәй миңә уның хәйере! Бер бөртөк баламды үҙем дә ҡарайым!

Шуның менән бөттө икән тиһәм, юҡ инде, ҡәйнә ишараты бер пакет итеп тороп ҡатып бөткән кәнфиттәрен ебәргән. Нисек тамағыңа барыр шуның ҡаты-ҡотоһо?! Ғәрләнмәй шуны ашап ултырмам инде! Кем белә, бәлки, сихырлап та ебәргәндер. Хәҙер кеше ҡулынан әйбер алыу ҙа ҡурҡыныс. Әллә ниндәй заман китте. Бәләһенән баш-аяҡ. Унынын да сүплеккә һелтәнем.

«Етәр! Күп түҙҙем! Улар минең өсөн хәҙер үлгән», – тинем үҙ алдыма. Шуларҙы хәтерләткән бөтә фотоларҙы йыртып ташланым. Яңынан тормош башлайым! Алла бирһә, аҫыл егетенә сығырмын әле! Ана, эштә ҡайһы-бер ҡатындар үҙенән ун-ун биш йәшкә кесерәккә сыға. Ике балаһы булып та! Модаһы шулай!

Төрлө хәйер менән ялҡытҡанына, ярай күҙ йомдом. Ә инде мәктәпкә барып, шул Варистың малайымды телефон менән әүрәткән булып, үҙенә яҡынайтырға тырышыуы, сығырымдан сығарҙы. Унынын белмәҫ тә инем, ҡараһам, Ласын мәктәптән ҡайтҡан да телефонда уйнап ултыра.

– Ҡайҙан алдың? Урланыңмы әллә? – тим, аптырап. Малай шыма. Ахырҙа беләгенән тотоп алдым да елтерәтергә тотондом. – Әлүк баштан урлаша башланыңмы? Атайыңдар яғына оҡшаһаң, белмәйем, кем булырһың…

– Урламаным! – тине, илай яҙып улым.

– Улай булғас, ҡайҙан алдың?

– Атайым бүләк итте.

– Ке-е-ем? Атайым, тиһеңме?! Уны ҡайҙа күрҙең?

– Бөгөн ул миңә мәктәпкә килде. Мин ебәргән кейемдәр яранымы, тип һорашты…

Ярһыуымдың сиге юҡ ине. Ах, суҡынсыҡ! Тапкан бит юлын. Судлашып йөрөгән көндәрҙе иҫемә төшөрһәм, сәсем үрә тора. Әсәһе ҡоторталыр шуны, әсәһе! Башҡа этем дә түгел.

– Ул һиңә атай түгел! – тип телефонын тартып алдым да иҙәнгә бәрҙем. – Тағы шуның ҡулынан берәй нәмә алһаң, миңә үпкәләмә!

Әйтерһең, ошо телефон теге ҡотһоҙ ирҙең үҙе кеүек енемде ҡабартты. Йән көсөмә шуны тапарға тотондом.

– Әсәй, нишләйһең ул?! Атайға әйтәм!.. – Улым ҡысҡырып илап ебәрҙе.

– Бик кәрәк инең һин уға! Һине уйлаһа, бергә йәшәп ятҡан булыр инек! Уға һин түгел, болғаҡ әсәһе кәрәк!..

# Мин – бала

Ныҡ итеп асыҡтым. Эсем эскә йәбеште, шикелле. Атларға ла хәлем юҡ. Теге ағайҙан көскә ҡасып ҡотолғас, тынныслана алмай бер булдым. Һаман асыу килә шул кешегә! Ҡалай хәйләкәр булып сыҡты! Мине алдатып полицияға тапшырмаҡ булған. Ярай әле ҡасып ҡотолдом. Инде был яғына һағыраҡ булыр кәрәк. Бөтәһенә лә ышанып барырға тимәгән.

Белорет – ҙур булмаған, ыҡсым ғына, матур, таҙа ҡала. Әлбиттә, был Өфө түгел, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек гөжләп тормай. Бында тыныс, кешеләр ҙә ашыҡмай ғына, яй итеп атлап йөрөй. Ут ҡапҡандай аҡты-ҡараны күрмәй йүгермәйҙәр. Бында йәшәгән кешеләр ҡалай бәхетле икән. Ҡаланың бер яҡ осонан икенсе яғына йәйәү атлап етеп була. Быны мин теге машинала ҡала эсенән үткәндә тоҫмалланым. Автобуста тығылып йөрөргә лә кәрәкмәй. Ярай, эстә бүреләр олоғанда ҡала менән һоҡланыу ҡайғыһы юҡ. Ҡараңғы төшһә, булыр шунда. Ҡайҙа барырға һуң? Кинәт келт итеп башҡа бер уй килде. Баҙарҙы табыр кәрәк! Унда бөтә ашамлыҡ! Берәй нәмәһе табылыр әле. Осраған тәүге кешенән юлды һораштым. Туп-тура кинотеатрға тиклем бараһың да, уң яҡҡа боролоп аҫҡа төшәһең, тинеләр. Биш минутлыҡ юл.

Баҙар гөжләп тора. Әсәй менән мин дә гел баҙарға йөрөргә яратам. Унда нимә генә юҡ! Донъяның бөтә байлығы ошо ергә йыйылған тиерһең. Төрлө тәмле еҫтәр танауҙы ҡытыҡлай… Тик был баҙар бүтәнсәрәк булып сыҡты. Тышҡы яғында кешеләр төрлө кейемдәр, көрәк-балталар, велосипедтар, мотоциклдар, тағы әллә күпме кәрәк-яраҡтар һата. Уныһы миңә ҡыҙыҡ түгел. Әкиәттәге кеүек балтанан бутҡа бешереп булмай ҙа инде. Баҙарҙы шулай ике мәртәбә урап сыҡтым, тамаҡ туйҙырырлыҡ бер урын да тапманым. Их, хәҙер эргәмдә атайым менән әсәйем булһа!.. Шул саҡ алдымдан таныш кеше үтеп китте. Йөрәгем жыу итеп ҡалды. Бәй, был бит минең атайым түгелме? Эйе, сәсе лә уныҡы һымаҡ, атлауы ла таныш. Был минең атай! Минеке! Күҙҙән юғалмаҫ борон кешеләрҙе этә-этә унан артынан йүгерҙем. Ә атай туктарға ла уйламай.

– Ата-а-а-ай! – тип ҡысҡырҙым йән көсөмә. – А-та-ааа-ай!

Ул мине ишетмәй, күрәһең. Тағы нығыраҡ йүгерҙем. Тамаҡҡа төйөр килеп тығылды, тыным быуыла. Ҡыуып еттем дә, түҙмәй, кейеменә йәбештем:

– Ат-та-ай! – тип ҡысҡырып ебәрҙем. Ул боролдо. Аптырап, ебеп төшкәндәй булды. Мин яңылышҡанмын.

– ин атайыңды юғалттыңмы әллә, балаҡай? – тип йәлләгәндәй ҡарап ҡуйҙы.

Күңелгә шул тиклем ҡыйын булып китте. Саҡ илап ебәрмәнем. Үҙемде тыйҙым.

– Ғәфү итегеҙ… – Башымды түбән эйеп, кире боролоп киттем.

…Бына «Үҙәк баҙар» тип яҙылған бина алдына килеп төртөлдөм. Үҙе бер ҡатлы, бейек тәҙрәләре, төрлө яҙыуҙары балҡып тора. Кешеләр инеп тора, сығып тора. Сыҡҡандарының муҡсайы тулы ризыҡ. Етмәһә, ишек асылғанда, унан тәмле еҫ пырх итеп ҡала. Бына ҡайҙа ул ысын баҙар! Мин шул ашамлыҡтар һатылған баҙарҙың сит яғынан йөрөгәнмен икән. Ҡыйыу ғына эскә үттем. Күргәндәремдән күҙ бәзләп китте. Әл-лә-ләәәй! Нимә генә юҡ! Алма, сейә, икмәк, колбаса, балыҡ, ит, һөт, ҡаймаҡ… Рәт-рәт булып теҙелеп киткәндәр. Ғүмерҙә аш күрмәгәндәй шул рәттәр буйлап еҫкәнеп йөрөй башланым.

Тәүҙә сәтләүектәр һатылған урынға туктаным. Бер ни ҙә булмағандай йәшниктән таҙартылған сәтләүекте алдым да ҡабып ебәрҙем. Һатыусы һиҙмәне. Тағы берәүгә үрелдем.

– Малай, һин нимә алаһың? – Һатыусының ҡәтғи тауышынан ҡаушап ҡалдым.

– Әле һайлайым… – тигән булдым.

– Аңлашылды. Бар бүтән ерҙән һайла!

Емеш-еләктәр һатылған кибеткә барып туҡталдым. Кеше күрмәгәндә бер сливаны алдым да йотоп ебәрҙем. Иғтибар итеүсе булманы. Дәртләнеп китеп, усыма тултырып виноград алдым. Кеҫәгә һалып та өлгөрмәнем, дәү кәүҙәле һатыусы үлә яҙып ҡысҡырып ебәрҙе:

– Нимә эшләйһең ул?!

– атып алырға килдем. Тәүҙә тәмләп ҡарайым.

– Кеше шулай услап тәмләйме? Мине банкрот итергә уйлайһыңмы?

– Мин бит…

– Виноградты кире һал да кит бынан!

Хәҙер баҙар эсенән иркенләп йөрөү ҙә ҡурҡыта. Бөтәһе лә миңә тексәйеп ҡарағандай. «Ана, бур килә. Һағыраҡ булығыҙ» тигәндәй улар миңә ҡарап ҡала. Баҙар эсен бер нисә тапҡыр урап сыҡҡас, бөтәһе лә мине таный кеүек тойола.

Мөйөштә генә бер бәләкәй өҫтәлдә симешкә һатып ултырған әбей алдына барып баҫтым. Юҡҡа түгел. Ул шул тиклем рәхәтләнеп, тәмле еҫ сығарып колбаса менән икмәк ашай ине. Шунан кефир эсеп ебәрә. Бөтә ҡарашым әбейҙә түгел, шул бутербродта ғына. Әбейҙән ситтәрәк буш урын бар ине, шунда ултырҙым да уның ашағанын күҙәтә башланым. Бына әбей ҙур итеп тешләне, эсеп ебәрҙе. Ауыҙын һөрттө. Бутерброд ике ҡабыуҙа юҡ булды. Сумкаһынан тағы берәүҙе сығарҙы. Унан күҙемде лә алмайым, нимәлер өмөт иткән тоғро эттәй күҙәтәм. Ул ҡабам тип ауыҙын асһа, минең дә ауыҙым үҙенән-үҙе асыла. Ул кефирҙы эсһә, мин дә ҡулым менән ҡабатлап, эскәндәй булам. Үҙем дә аңламайым ниңә улай иткәнемде: әллә әбейҙе эләкләйем, әллә ашайым тип үҙемде ышандырырға теләүем. Ул кефир эсеп, ауыҙын һөртһә, мин дә уның кеүек ауыҙымды һөртөп ҡуям.

Әбей кинәт ашауҙан туктаны ла күҙҙәрен аҡайтып миңә ҡарап ҡуйҙы. Мин дә унан ҡарашымды алманым. Теге күҙен минән алмай тағы ашай башланы, мин дә ашағандай ауыҙымды асып уны ҡабатланым. Әбей йәне көйөп саҡ ҡарлығып ебәрмәне.

– иңә етешмәйме әллә? – тине асыулы ғына.

– Ашайым!

– Мине эләкләйһең бит!

– Юҡ. Һеҙҙең кеүек ашайым.

– ы-ы-ы… Ҡулыңда бер нәмә лә юҡ бит.

– Булмаһа ла. Һеҙҙе ҡабатлайым да туйған һымаҡ булам.

– Үәт, йүләр. Улайһа, алыҫыраҡ китеп аша. Минең эргәлә торма!

– еҙҙән китһәм, колбаса еҫе юғала.

– Аптыраттың әле. Ата-әсәйең ҡайҙа?

– Улар алыҫта.

– Асарбаҡмы әллә һин?

– Юҡ! Атайыма китеп барам…

– Атайың ҡайҙа һуң?

– Сибайҙа.

– Сибайҙа?! Ә әсәйең?

– Өфөлә.

– Атаҡ… Бигерәк аптыраттың мине. Өфө ҡайҙа ла, Сибай ҡайҙа! Ә һин бында нисек килеп эләктең?

– Юл ыңғайы ғына…

– Әллә алдайһың, әллә ысын. Бик сәйер балаһың. Асыктыңмы әллә?

– Эйе, иртәнсәктән бирле ашаған юҡ.

– Кил һуң эргәмә. Мә, һыйлан. – Әбей бер бутербродты сығарҙы ла миңә һуҙҙы.

Әбейҙең бите сырышып, уҫал булып күренһә лә, бик алсаҡ икән. Ул һөйләй бирә, мин, ауыҙым буш булмағас, «эйе» тигәндәй баш һелкәм. Һөйләшеү ҡайғыһымы ни?! Тиҙерәк тамаҡ туйҙырыр кәрәк!

– Пенсиям әҙ. Газға, һыуға, утка түләһәм, үҙемә ашарға етмәй, – тине ул. – Шуға симешкә ҡыҙҙырам да ошонда килтереп һатам. Ике банка ҡайнатма ла алып сыҡҡайным, уныһын алып

киттеләр. Пенсионерҙарға бында буш урын бирәләр, һатыу итеү өсөн. Әле хәл барҙа, сығам. Аҡмаһа ла, тамып тора…

Мин артыҡ үҙем тураһында һөйләмәҫкә булдым. Былай ҙа бая артығын ысҡындырып ташланым, шикелле. Быныһы ла теге ир һымаҡ полицияға тапшырырға булһа! Кем белә әбейҙең уйында ни барын? Шуға ла, әбей һорау алыуға күсмәһен өсөн, һөйләшеүҙе бөтөнләй икенсе яҡҡа борам:

– Баҙар ҡалай ҙур икән. Бында сусҡа баштарын да һаталар. Һеҙ сусҡа ите яратағыҙмы?.. Ҡайнатманы күп итеп әҙерләнегеҙме?.. Һеҙ бик йәш күренәһегеҙ. Һәр саҡ йәш булып ҡалыр өсөн нимә эшләргә кәрәк…

Бына шундайыраҡ һорауҙар яуҙырҙым. Һөйләшеүгә әүрәй торғас, өс бутербродты ялп иттергәнмен икән. Тамаҡ туйғандай булды.

– Ярҙам кәрәк булһа, әйтегеҙ, – тип әбейгә рәхмәтемде белдергем килде.

– Килеп сығып шәп иттең әле. Мин ҡулымды йыуып килгәнсе әйберҙәремде ҡарап тор әле.

Ул эше менән китеп торғансы, мин симешкә сиртә бирҙем. Әбей оҙаҡ йөрөмәне.

– Тиҙҙән баҙар ябыла, һин ҡайҙа бараһың инде? – тип һорап ҡуйҙы.

– Барыр ерем бар, – тинем, кинәт кенә алдап. Баҙарға ингәс тә, бик шәп уй башҡа килгәйне. Шуға үҙемде ышаныслы тотам. Икенсенән, яңы ғына танышҡан кешегә эйәреп бармайым да инде. Үҙе саҡырманы ла былай…

– Ярай, балаҡай, матур йөрө, – тип ҡалды әбей. Хушлашҡанда кеҫәмә тултырғансы симешкә һалды. Рәхмәттәремде әйтә-әйтә, баҙарҙың бүтән рәттәре буйлап китеп, унық күҙенән юғалдым.

Ә бараһы урыным, ысынлап та, бар! Шәп урында йоҡлаясаҡмын бөгөн. Бүтәндәрҙең башына ла инмәҫ әле бындай уй. Туҡмын да, йылыла ғына буласаҡмын.

Мин был урынды баяғы уҡ үҙемә билдәләп ҡуйғайным. Баҙарҙың запас сығыу ишеге алдында ҡатырға йәшниктәр тау булып өйөлөп ята. Һатыусылар буш йәшниктәрҙе ошонда өйә. Минең алда ғына бер нисә һатыусы ошо өйөмгә буш йәшниктәрен килтереп ырғытты. Баҙар эсендә кешеләр кәмегәндән-кәмей барҙы. Иғтибарлап ҡарап сыҡтым, эстән һаҡсы ултыра торған урын юҡ. Күрәһең, бөтәһе лә сығып ҡайтып киткәс, кемдер баҙарҙы тыштан бикләй. Ә мин эстә ҡаласаҡмын!

Кешеләр күрмәгәндә генә теге йәшниктәр аҫтына шыуышып индем дә яттым. Әйтерһең дә, ҡыуыш эсендәмен. Өҫтән дә, сит яҡтан да мине йәшниктәр ураткан. Ятҡан ерем дә йомшаҡ, ҡараңғы. Тағы бер нисә кеше «тауға» йәшниктәрен ырғытты. Ошо өйөм аҫтында кеше ятҡаны баштарына ла инмәйҙер әле. Хәҙер кешеләр сығып бөткәнен көтөр кәрәк. Шунан башланасаҡ байрам! Көтөп ята торғас, йоҡлап киткәнмен…

Ҡулым ойоғанға уянып китһәм, тирә-яҡта тып-тын. Тимәк, бөтәһе лә ҡайтҡан, баҙар бикле. Бер кемдең дә тауышы ишетелмәй. Шулай ҙа һағыраҡ булыу кәрәк. Йәшниктәр араһынан ипләп кенә башымды сығарҙым. Ҡараңғы икән. Тәҙрәләрҙән төшкән ай нурҙары ғына эске яҡты яҡтырта. Бинаның икенсе яҡ осонда беленер-беленмәҫ кенә ут янып тора. Бер аҙ ҡурҡыныс та булып китте.

Эргәмдә әллә нәмәләр ҡытыр-ҡытыр килә. Ҡомаҡтар, күрәһең. Эргәмдә генә сипылдашалар. Ҡот осоп, тоноҡ ҡына янған ут яғына йүгерҙем. Ысынлап та, баҙарҙа минән башҡа берәү ҙә юҡ. Мин бер үҙем. Ҡомаҡтарҙы иҫәпкә алмағанда. Ярай, хәҙер утты яҡтыртһам, улары ҡасыр. Ошондағы бөтә байлыҡҡа мин хужа! Бер төнгә булһа ла! Мин бөгөн иң бәхетле кеше икән! Күптәр бер төнгә булһа ла минең урында ҡалырға хыялланғандыр. Нимәне теләйһең – аша! Аҡса ла кәрәкмәй. Һатыусылар ҙа ризыҡ тулы кәштәләрен аҡ сепрәк менән генә ябып киткән. Һыуыткыстар ҙа бикле түгел. Бик яҡшы. Минең өсөн шулай тырышҡандар. Тәүҙә теге емеш-еләктәр һатылған урынға килдем. Хужаһы көндөҙ минең менән ҡалай эре генә һөйләшә ине. Һи-и! Сепрәкте күтәреүем булды, бөтә байлыҡ минең алда. Тәүҙә ҙур ғына ҡыҙыл алманы

ҡулыма алдым да ныҡ итеп шатырлатып тешләнем. Икенсе ҡулыма грушаны алдым. Грушаны мин нығыраҡ яратам. Шуға алманы ашап бөтөп торманым. Уныһын иҙәнгә бәрҙем дә супылдатып груша ашай башланым. Шунан персикты, бананды һоғондом. Һатыусыһы көндөҙ бик дорфа булғанға, кире сепрәкте ябып торманым. Банан ҡабығын иҙәнгә бәрҙем дә рәт буйлап ары киттем. Һыуытҡысты асып ебәрҙем. Ҡараһам, әллә нисә төр колбаса ята! Иң оҙонон һайлап алдым да ҡап уртаға һындырып, ашай башланым. Колбаса булғас, икмәк тә кәрәк. Ҙур булканы киләһе кәштәнән алдым. Колбаса менән икмәкте ашай торғас, тамаҡ кибеп китте. Һут эсер кәрәк. Төрлө эсемлектәр теҙелеп торған ерҙән матур һауытлыһын астым да эсеп ебәрҙем. Уныһы томаттан булып сыҡты. Томат һутын ситкә ҡуйҙым да башҡаһын астым. Алманан.

Сәтләүектәрҙе ярып ашаным. Сей йомортҡаларҙы һытып ҡараным. Ҡыҙыҡ өсөн. Шулай рәт буйлап китә барҙым. Юлда осраған һәр нәмәне тәмләп ҡарайым, йә берҙе тешләйем дә ташлайым. Печеньены йә кәнфитте саҡ ҡына ҡабам да кире һалам. Кефирҙы бер уртланым да асыҡ көйөнә ҡалдырҙым. Бешкән балыҡ, киптерелгән балыҡ, повидло, сыр, ҡыяр, сосиска, эремсек… Тәмләмәгән ризыҡ ҡалманы. Йөрөй торғас, эсем туп һымаҡ ташты. Хәҙер ашағым да килмәй. Атлауы ла ауыр. Саманан тыш ашап ташланым, шикелле…

Инде теге йәшниктәр араһына ятып, таң атҡанын көтөр кәрәк. Иртәнсәк, баҙар яңынан гөжләй башлаһа, һиҙҙермәй генә «өңөмдән» сығырмын да, ҡасырмын. Тик тыныс ҡына ятып булманы. Эсем үлтереп ауырта башланы. Сыҙап булмай. Етмәһә, уҡшыта. Ята биргәс, үтер тип уйлағайным да. Юҡ шул. Хәлем хөртәйгәндән-хөртәйҙе. Әллә ысын, әллә төштә кеүек: күҙемде йомһам, бөтә ер шары әйләнгән кеүек. Үҙем ниндәйҙер соҡорға осоп барған һымаҡмын. Тәнгә берсә эҫе, берсә һыуыҡ булып китә. Ҡалтыранам, тиргә батам. Нимә булды икән? «Әсәй! Атай! Ҡотҡарығыҙ!» – тип ҡысҡырыр инем, мине берәү ҙә ишетмәҫ шул. Әллә үлеп барам инде?!

# Мин – атай

Йөрөгән саҡта ғына ҡыҙҙар шәп икән. Төҫкә һылыу, һүҙҙәре татлы, үҙе тәрбиәле, итәғәтле. Имеш, шул ярамай, был ярамай. Өйләнешеп, бала тыуғас, ен алмаштырҙы тиерһең – үҙгәрҙе лә ҡуйҙы. Ҡайҙан килә быndaй яһиллыҡ?! Минең дә бит матур итеп баламды үҫтереп, тәрбиә биреп, йәшәһе килә ине. Ә уға бер нәмә лә оҡшамай. Дуҫтарым килһә – талаш, әсәйем берәй кәңәш әйтһә – ҡысҡыра, теләһә кемдән көнләшә. Хатта тәмәке тартырға сыҡҡан арала ла, теләһә кемдән көнләшеп, юҡ-бар уйлап хәлде ала. Телефонды ҡалдырыр әмәл юҡ, соҡона. Берәй кем шылтыратһа, «кем менән һөйләштең» «нимә тине» «һин уға нимәгә кәрәк булдың» тип һорашып, ҡаҡ быуынға төшә. Шофер булып эшләгәс, ниндәй генә хәлдәр булмай, эштә һуңға ҡалырға ла тура килә. Был бисә аңын-тоңон белмәй, эшкә шылтыратып, мине таптыра, етәксе менән талаша. Хәҙер шул арҡала кешегә күренергә ғәрләнәм. Ошо булдымы тормош?!

Бына әле лә телефон тынғаны юҡ. Беренсе шылтыратҡанында уҡ иҫәнлек-һаулыҡ һорашыу юҡ, йыртыла яҙып ҡысҡыра башланы:

– Хәҙер үк баланы ҡайтар! Әгәр тыңламаһаң, минең кешеләр килеп үҙеңде ҡанға батырасаҡ! Аяғыңа ла баҫа алмай, инвалид коляскаһында ултырырһың!..

– Таңһылыу, ишет мине! Балаға теймәнем. Әле үҙем эштән бушаған юҡ…

– Алдама! Һинең генә этлегең! Яҡшылыҡ менән әйткәнде тыңла! Аҙаҡ үкенерһең! Әсәйеңә лә, үҙеңә лә йәшәргә бирмәйәсәкмен! Минең менән шаярмағыҙ!

– Етәр тинем! Юғалғас, бергәләп эҙләйек. Ул да бит минең берҙән-бер балам!

– Ул һинеке түгел! Һин тапманың! Суд баланы миңә бирҙе! Ниңә генә үлмәйһең икән?! Сәсрәп киткере! Бөтә бәхетһеҙлегем һинең арҡала! Уйларға бер сәғәт ваҡыт бирәм! Аңламаһаң, минең кешеләр килеп аңлатырҙар! Нык итеп аңлатырҙар! Аяғымды үберҙәй булырһың да!..

– ин мине ҡурҡытма, Таңһылыу!

– Ҡарарбыҙ әле… Мин шаярта тип уйлайһыңдыр.

Шул ғазраилдың тауышын ишетмәҫ өсөн һөйләшеүҙе өҙҙөм. Юҡ инде, барыбер тынғы бирмәй. Телефон аша бер-бер артлы ҡурҡыныс һүҙҙәр яҙа: «Ҡатын төҫө күрмәһәң ярар ине! Аяҡ-ҡулдарың тартышып, ауыҙыңа бер тамсы һыу ҙа һалырлыҡ кешең булмаһын! Минең хәсрәттәрем һиңә меңләтә әйләнеп ҡайтһын! Ләғнәт яуғыры!»

«Эшеңдән ҡыуҙыртам! Һине фаш итеп телевидениеға интервью бирәм! Мин һиңә устрою!»

«Һин ир түгел! Бисәкәй! Мин һине ҡарғайым. Үлһәң ярар ине!»

«Минең күҙ йәшем төшәсәк. Әле мине илатып, берәүҙең дә бәхетле булғанын күргән юҡ. Ҡайтар баланы. Ҡайтармаһаң, үҙеңде иртәгә аяғың менән алға өйөңдән алып сығасаҡтар. Минең кешеләр юлда. Көт…»

«Үҙеңә зыяраттан урын эҙләй тор!!!»

Шундай береһенән-береһе әшәке хәбәрҙәрҙе уҡып өлгөрөп булмай. Ҡалғанына күҙ йоморға була. Тик үлем менән ҡурҡытып әллә нимәләр яҙа бит. Был яһил бисәнең башында нимә икәнен белеп булмай. Бәлки, ысынлап, минең менән берәй нәмә эшләтергә уйлайҙыр… Юҡ, былай ғына ҡалдырырға ярамай. Полицияға барып, бөтәһен дә әйтеп ҡуйыуым яҡшыраҡ. Үҙен генә аҡыллы тип уйламаһын. Үлем менән ҡурҡытҡаны өсөн дә закон бар! Әйҙә үҙ һүҙҙәре өсөн яуап бирһен!..

# Мин – бала

Тау итәгендә – атай менән әсәй тора. Ҡулға-кул тотошҡандар, йөҙҙәре шат, ихлас йылмаялар. Мин икеһен күптән шул килеш бергә күргәнем юҡ ине. Уларҙы ошондай ҡиәфәттә күреп, үҙемде лә сикһеҙ бәхетле тойҙом. Ә мин тау башында торам. Шатлығымдан ҡолас йәйеп уларҙың ҡаршыһына йүгерәм. Улар минең ҡаршыға йүгерә. «Балаҡайым! Ҡайҙа юғалып йөрөнөң?» – ти иламһыраған тауыш менән әсәйем. «Инде өсәүләп бергә йәшәйәсәкбеҙ», – ти атайым. Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, мин талпынып тағы ныҕыраҡ сабам. Күптән көттөм бит ошо татлы минуттарҙы. Юҡ, сапмайым, ҡулдарымды йәйеп осам, шикелле. Әйтерһең дә, мин ике ҡуллы кеше түгел, ә ҡанатлы ҡош! Бына, хәҙер, хәҙер атай-әсәйемдең ҡосағында буласаҡмын! «Мин һеҙҙе яратам» тип ҡосаҡлайым тигәндә генә, ике ҡулым – ике ҡанатҡа әүерелеп, күккә остом да киттем. Нисек инде улай?! Мин ҡошҡа әйләндемме хәҙер?! Ата-әсәйем иларҙай булып, ерҙә аптырап тороп ҡалды. Уларҙың мине ҡосаҡларға тип һонолған ҡулы ҡапыл һулып төштө. Ә мин тағы бейекә осам, осам, осам…

– Малай, уян, уян… – тип һаҡ ҡына кемдер еңемдән тартҡанға уяныпкиттем. Күҙҙе асһам – тирә-яҡ ап-аҡ. Аҡ карауаттар, бүлмә уртаһында аҡ өҫтәл, ҡорғандар ҙа аҡ төҫтән. Мин ятҡан карауаттағы мендәр ҙә, түшәк тә аҡтан. Аҡ халат кейгән апай ҡаршымда баҫып тора ине.

– О – о – о, терелде, – тине ул, шатланғандай. – Нисек эсәгең әйләнеп сыҡмаған. Үлә яҙғансы ашап…

Бер һүҙ ҙә әйтмәй, башымды ситкә борҙом. Инде аңланым – мин дауаханала ятам. Тик бында нисек килеп эләккәнемде асыҡ ҡына хәтерләмәйем. «Скорыйҙа» китеп барғанда ныҡ итеп өшөгәнемдән берҙе уянғаным хәтерҙә. «Тиҙерәк булығыҙ! Ул күгәрә башланы!» – тип ниндәйҙер ҡатындың ҡысҡырғанын иҫләйем. Шунан тағы аңымды юғалттым. Икенсе тапҡыр ауыҙыма оҙон трубка тығып, шуның аша ниндәйҙер тоҙло һыу ҡойғандарын да иҫләйем. Трубка тамаҡты шул тиклем ҡыра, мин ауыртыуға тыпырсынам, тик ысҡына алмайым. Ике ҡулымды кемдер ныҡ итеп артҡы яҡтан ҡосаҡлап тотҡан да ебәрмәй. Тағы аңымды юғалттым.

Әле палатала ятам. Битемде, ҡулымды тотоп ҡараным. Үҙемде тоям. Тимәк, теремен. Юрғанымды ситкә алып, торорға маташтым.

– Юҡ, юҡ! Әле торорға ярамай! – тип тыйҙы апай. – Һиңә хәл йыйыр кәрәк. Башың әйләнмәйме?

– Юҡ, – тинем ишетелер-ишетелмәҫ.

Палатаға тағы бер аҡ халатлы апай килеп инде. Уныһы йәшкә олораҡ. Ҡулына папка тотҡан. Яңы ингән апай усын маңлайыма ҡуйҙы:

– Температураһы төшкән. Быныһы яҡшы.

Шунан миңә һынамсыл ҡарап ҡуйҙы.

– инең картаңды тултырыр кәрәк. Ней бер документың да үҙең менән юҡ. Йә, һөйлә – исемең, фамилияң, нисә йәш…

Был апай нимәгә төпсөнә икән? Әллә теге полиция эҙләй микән? Баҙарҙа урлашып йөрөгәнем өсөн, билдәле, башымдан һыйпап ҡуймаҫтар. Моғайын, әле хәлем яҡшырғанын ғына көтәләрҙер. Хәҙер дөрөҫөн әйтеп бирһәм, үҙемә насар эшләйәсәкмен. Әллә бөтөнләй иҫләмәгәнгә һалышырға микән? Шулай дөрөҫөрәк булыр.

– Ну, аҡыллым… тыңлайым.

– Иҫләмәйем, – тинем ҡыйыу ғына.

– Нимәне иҫләмәйең?

– Бер нәмәне лә иҫләмәйем.

– Исемеңде генә әйтә алаһыңдыр. Беҙгә артығы кәрәкмәй.

– …

– Ҡайҙа йәшәйһең һуң?

– Белмәйем. Баҙарҙа башым менән иҙәнгә ҡоланым. Шунан бер нәмә лә иҫләмәйем.

– Ата-әсәйең бармы һуң? – тип һүҙгә ҡушылды икенсеһе.

– Бар!

– Бик яҡшы! – Икеһенең дә йөҙөндә йылмайыу сағылды. – Исемдәре нисек?

– Атайым – Варис, әсәйем – Таңһылыу.

Ике апай ҙа көлөп ебәрҙе:

– Бик ҡыҙыҡ икән. Ата-әсәйеңдең исемен иҫләйһең, ә үҙеңдекен юҡ.

Тотолғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Хәҙер апайҙар алдағанымды аңланы, күрәһең. Асыуымдан ирендәремде ҡымтыным.

– Ярай, – тине олораҡы. – Әлегә ятып тор. Палатанан сығып йөрөмә. Хәл йый. Медсестра дарыуҙар алып килəсәк, һин уларҙы ташлама, эс, тиҙерәк төҙәлерһең. Төшкөгә бутҡа ашарһың. Әлегә күп ашарға ярамай, үҙеңә ҡыйын булыр. Аңлашылдымы?

# Конец ознакомительного фрагмента.

Текст предоставлен ООО «Литрес».

Прочитайте эту книгу целиком, купив полную легальную версию на Литрес.

Безопасно оплатить книгу можно банковской картой Visa, MasterCard, Maestro, со счета мобильного телефона, с платежного терминала, в салоне МТС или Связной, через PayPal, WebMoney, Яндекс.Деньги, QIWI Кошелек, бонусными картами или другим удобным Вам способом.